**Тема:** Н.Ҡотдосов. Аттың аҡылы бармы?

**Маҡсат:** -ат тураһында күберәк мәғлүмәт биреү,

-уҡыусыларҙың хәтерен, һөйләү һәм фекерләү ҡеүәһен үҫтереү,

-атҡа ҡарата ихтирам тойғоһон тәрбиәләү,

**Йыһазландырыу:** компьютер, телевизор, карточкалар, ат һүрәте

**Дәрес барышы:**

**Ойоштороу моменты**: (психологик атмосфера ситуацияһын тыуҙырыу)

Хәйерле көн! Тағы бер матур, гүзәл көн тыуҙы, ҡояш ҡалҡты. Тағы ла бер көнгә ҙурайҙығыҙ. Бөгөнгө көнгә нимә тип өндәшәһегеҙ?

Һаумы, ҡояш! Һаумы дуҫым!

Һаумыһығыҙ, уҡытыусым!

Беҙ- сәләмәт, беҙ-матур!

Салауат кеүек батыр!

**Артикуляцион күнегеүҙәр:** (тын юлдарына гимнастика)

-бәпембә өрөү

-мамыҡ, һауалағы мамыҡты төшөрмәҫкә

-сәскәләр,хуш еҫле сәскәләрҙе еҫкәү

-өндәр, тәрән һулайбыҙ ҙа һәм тынды сығарғанда һуҙынҡы өндәрҙе әйтәбеҙ( ә,и,э,ө)

**Темаға сығыу:**

Дүрттер уның аяғы,

Түбәһендә ҡолағы,

Илдән-илгә еткерер,

Таштан ҡаты тояғы. **(ат)** 

Әйҙәгеҙ атҡа исем бирәйек.( **Аҡбуҙат, Толпар, Дүрткүҙ һ.б.)**

**Дәрескә маҡсат ҡуйыу:**

-аттар тураһында күберәк белеү,

-дөрөҫ итеп һөйләмдәр төҙөргә,

-яңы һүҙҙәр өйрәнеү,

-матур, хатаһыҙ яҙырға һ.б.

Шулай итеп бөгөнгә дәрестә нимәләр эшләрбеҙ? Ошо һүрәттәргә ҡарап әйтәбеҙ.







-Ә һеҙ аттар тураһында нимәләр беләһегеҙ?

**Уҡыусыларҙың сығыштары:**

1) Башҡорт халҡы борондан уҡ ат тәрбиәләгән. Ат уның юлдашы, дуҫы булған. Башҡорт аты сығышы менән дала урман яғы тоҡомона ҡарай. Башы ҙур, маңлайы киң, муйыны йыуан, арҡаһы яҫы, тура булған.

2) Элек атты ҡайһы саҡта бала ҡарарға ла ҡалдырғандар. Бала ситкә китһә, ат яғаһынан тешләп килтереп ҡуя. Улар һалдаттарҙы һуғыш яланынан да алып сыҡҡандар. Аттар хужаһын һағынып илай, хатта үлеп тә ҡуя.

**Һығымта яһау.** Шулай итеп, аттар ниндәй була?

**Музыка тыңлау. Их, ҡымыҙы, ҡымыҙы!**

**-**Ә һеҙҙең ҡымыҙ эскәнегеҙ бармы?

**-**Тәме ниндәй?

Бейә һөтөнән ҡымыҙ эшләйҙәр, унда бик күп витаминдар бар. Рус яҙыусылары А.П.Чехов, Л.Н.Толстой, С.Т.Аксаков ҡымыҙҙы бик яраталар. Башҡортостанда ҡымыҙ менән дауалаған бик күп **шифаханаларҙа** бар. Ҡайһы бер шифаханаларҙа кешеләр ат менән генә йөрөр өсөн генә баралар, ни өсөн тип уйлайһығыҙ?

**Иппотерапия.** Медицинала иппотерапия тигән төшөнсә бар: ул кеше күңелен, эске донъяһын ат менән аралашыу аша дауалау икән. Тимәк, ат менән яҡын булған кеше **ҡара күңелле** була алмай, ундай кешеләрҙең күңеле саф, матур була.

**Карточкаларҙа эш.** Атҡа тап килгән һүҙҙәрҙе (һыҙаттарҙы) һайлап алығыҙ һәм таҡтаға сығып элегеҙ.

Тоғро дуҫ, ғүмерлек юлдаш, ялҡау, матур, аҡыллы, ярҙамсы, файҙалы ҡымыҙ, иппотерапия, хәйләкәр, ҡурҡаҡ.

**Үҙ аллы эш.**

-Ошоларҙан сығып ат тураһында бер-нисә һөйләм төҙөп яҙығыҙ.

**Ял минуты.** Ҡурай көйөнә бейеп алайыҡ.

**Текст өҫтөндә эш.** Атты аҡыллы тип әйттегеҙ, ысынлап та аттың аҡылы бар микән? Был турала һеҙ өйҙә уҡып килергә тейеш инегеҙ.

**Наил Ҡотдосов.** 1941 йылда Туймазы районы Йәрмөхәмәт ауылында тыуа. Һөнәре буйынса ул зоотехник, яҙыусы.

**1)** Һүҙлек эше. Ошо һүҙҙәр һеҙгә аңлашылдымы?

Ҡылыҡ-характер

Теремек-

Серле-таинственный

Йөк-груз

Мәхшәр-кошмар, ужасно

Атты туғарҙым-распрягал лошадь(коня)

Теҙген-

Һырты-

**2)** Һорауҙарға яуаптар.

-Рауил ҡайҙа барырға сыға?

-Уларҙы кем ҡаршы ала? Уҡып күрһәтегеҙ?

-Урман ниндәй? Һүрәтләп һөйлә.

-Мортаза бабай ниндәй хикәйә һөйләй?

-Аттың аҡылы бармы?

-Ә һеҙ үҙегеҙ атҡа ышанып юлға сығып китер инегеҙме?

-Урманда яңылыш ҡына аҙаштығыҙ ти, һеҙҙең алда машина һәм ат, нимәне һайлар инегеҙ? Ни өсөн?

-Эйе, ат ул кешенең элек-электән тоғро дуҫы, юлдашы булған. Аты булған кеше бер ҡасан да юғалып ҡалмаған.

-Ни өсөн?

**Төркөмдәр менән эш**. (карточкаларҙа ижади эш)

**Парҙар менән эш. Кем тиҙерәк! (**серле мәҡәлде табыу)

42 15 34 37 15 27 16 6 1 1 26 26 1 1 15 37 16 16 37

Яҡшы ҡулда, ат та аҡыллы.

**Йыр йырлау.** Толпар атым.

**Йомғаҡлау**. Дәрестә иң мөһиме нимә булды? Нимәләр тураһында һөйләштек?

Ҡайһы урындары һеҙгә ҡыҙыҡлы йәки ҡыйын булды?

Үҙегеҙҙең эшегеҙҙән ҡәнәғәтһегеҙме?

Кемде маҡтап китер инегеҙ һәм ни өсөн?

Өй эше. 1) хикәйә буйынса бер нисә һүрәт төшөр.

2) ат тураһында кескәй инша яҙып килергә.

3) аттар тураһында бер нисә мәҡәл яҙырға.